ПУБЛИЦИСТИКА



*Сәлимйән БӘҘРЕТДИНОВ*

# МАТУРЛЫҠ АЛИҺӘҺЕ

*Очерк*



*Эльвира Батыршина*

Сихри гүзәллек, нәфислек, һылыулыҡ... Һәр кемде лә һоҡландыра, елкендерә, илһамландыра. Ҡашы ҡара, буйы зифа, гөл сәскәһе кеүек йәнгүзәлдәр ыласындай егеттәрҙең йөрәгендә дәрт, илһам ҡабыҙа, илаһи өмөт уята:

Һин һандуғас булһаң, мин ҡарлуғас,
Һайрашырбыҙ икәү, яҙ булғас.

Эйе, матурлыҡ — ул тәбиғәттең бөйөк тә, хозур ҙа бүләге, илһам, ижад, хыял сығанағы. Йәнә матурлыҡ — йәшәү йәме, кеше рухының гүзәллеге лә. Моғайын, шуға ла кеше һәр саҡ гүзәллеккә һәм камиллыҡҡа ынтылалыр.

Был фани донъяла ҡатын-ҡыҙҙың һандуғастай нәфис, зауыҡлы, ир-егеттәрҙең дә төҫ-ҡиәфәте күркәм, күңелгә ятышлы булыуы яҡшы. Шул да хәҡиҡәт: матур кеше генә — сәләмәт, сәләмәт кеше генә — матур. Шуға ла сәләмәт, матур итеү бик тә изге эш. Быны бөтә нескәлегендә төшөнә ”Эстетик Д-Люкс” салон-клиникаһының генераль директоры һәм баш табибы, беренсе категориялы табип-терапевт, Башҡорт дәүләт медицина университетының Медицина тергеҙеүе һәм курортология ғилми-тикшеренеү институты ғилми хеҙмәткәре Эльвира Әлфир ҡыҙы Батыршина.

Ғөмүмән, тәне һауҙың йәне һау икәнен үҫмер сағынан тойоп, белеп үҫә ул. Инәһе, башҡорт һылыуы, үҙ йәшенән күпкә йәш Зинфира Миңлебай ҡыҙы ғүмере буйы санэпидемстанцияла эшләй. Атаһының туғандары Фәссәхетдин, Фәрит ағайҙар ҙа — һаулыҡ һағындалар. Зат-

нәҫел һөнәрен дауам итеү уйы менән Эльвира Өфө ҡалаһындағы медицина йүнәлешендәге 35-се мәктәптә уҡый, ун дүрт йәшенән дауаханаларҙа санитарка булып эшләй. Латинса уҡырға өйрәнә, ҡан да, мәйет тә күрә, бысраҡ та таҙарта. Ауылда фельдшер булып эшләгән Динара еңгәһе уның күпте белеүенә хайран ҡала һәм Эльвираны табиплыҡҡа уҡырға өндәй. Ә Башҡорт дәүләт драма театры артистары Гүзәл апай менән Хәкимйән ағай Сәғитовтар сәнғәт институтына барырға димләй: ”Һин матурһың, һоҡланғысһың. Нимәгә ул һиңә ауырыуҙар? Киләсәгең — сәнғәт институты, сәхнә!” Мәгәр Эльвираның күңеле медицинаға тартыла. Мәктәптән шәфҡәт туташы дипломы алып сыға һәм медицина институтына уҡырға инә.

Яҙмыштыр инде, беренсе сентябрҙә үк буласаҡ ире, үҙе кеүек үк студент-медик Илшат Йәүҙәт улы менән осраша. Дүртенсе курста өйләнешәләр, бишенсе курста бәпестәре донъяға килә. Икеһе лә тырышып уҡый, Илшат хирургия, Эльвира терапия буйынса махсуслаша. 1995 йылда институтты тамамлап, интенсив терапия буйынса интернатура үтә һәм 44-се поликлиникаға эшкә ебәрелә. Бында кардиолог, физиотерапевт һөнәрҙәрен дә үҙләштерә. Физиотерапевт буларак ауырыуҙарҙы дауалағанда һимереүҙән, целлюлиттан арынырға, йәшәрергә лә булышлыҡ итә. Йәне-тәнендә тикшеренеү сәме урғыған Эльвира, инде ике балалы әсә, тергеҙеү медицинаһы һәм курортология кафедраһының клиник ординатураһына уҡырға инә. Ауырыуҙарҙы дарыуһыҙ, зарарһыҙ тәбиғи саралар: минераль һыуҙар, шифалы батҡаҡ, фитотерапия, талассотерапия, физиотерапия аппараттары, физкультура ярҙамында һауыҡтырыу зиһенен биләй. Тергеҙеү терапияһы ҡартайыу менән көрәшергә, йыйырсыҡтарҙан, тимгелдәрҙән һәм буй-һындағы, йөҙҙәге кәмселектәрҙән арынырға булышлыҡ иткән эстетик медицинаны ла үҙ эсенә ала. Дәрт-дарман, йәшәү сәме, кәйеф туранан-тура кешенең нисек күренеүенә лә бәйле.

Егерме беренсе быуатта, ижтимағи тормош, сәйәси, иҡтисади, социаль хәл, донъяға ҡараш, мөнәсәбәт үҙгәргән заманда, аралашыу, шәхси сифаттар ҙа башҡа. Күрмәккә лә, үрнәккә лә бар кешеләр, ыңғай тәьҫир ҡалдырған етәкселәр шөһрәтле. ”Йөҙө ниндәй — үҙе шундай” тигән һығымта юҡтан яһалмаған. Баһаңды, дәрәжәңде арттырыу өсөн үҙеңдең төҫ-ҡиәфәтең тураһында ла уйлау фарыз. Күҙең, битең, сәсең, ҡулың, бөтә килбәтең күркәм булыу һәйбәт. Халыҡ аҡылынса ла, кешенең күрке — йөҙ.

Беҙҙең заманда матурлыҡ, һомғоллоҡ, сәләмәтлек культына иғтибар көсәйҙе. Бит-тәндең сафлығын һаҡлау, косметик саралар, гигиена, дауалау косметикаһы буйынса Эльвираға ла йыш мөрәжәғәт итәләр. Пациенттар йәш табипта шәхси косметик клиника асыу уйын тыуҙыра. Мәгәр ул япраҡ ярырға мәле етмәгән бөрө рәүешендә генә әле. Медицина фәндәре докторы, профессор Лира Тәлғәт ҡыҙы Ғилметдинова менән аралашыу, фекерләшеү, хеҙмәттәшлек итеү Эльвираның сәмен арттыра. Эльвира шуны ныҡлап төшөнә: тәндең, ҡан тамырҙарының тону-

сын күтәреү матдәләр алмашыныуын яҡшырта, һөҙөмтәлә байтаҡ сирҙәр сигенә, сәләмәтлек нығый. Артыҡ тән ауырлығын кәметкәндәр гипертония, панкреатит кеүек ауырыуҙарҙан ҡотола. Клиник ординатураны тамамлап, Эльвира үҙенең белемен йәһәтерәк сырхауҙарҙы һауыҡтырыуҙа файҙаланырға теләй. Мәгәр бюджетҡа бәйле медицинала быны бойомға ашырыуы ҡыйын. Дауаханаларҙағы физиотерапия аппараттарының сифаты түбән, ә сит ил ҡорамалдары ҡиммәт.

Өфөләге ҙур предприятиелар, фирмалар үҙ сәләмәтлек пункттарын аса башлай, заманса сит ил медицина ҡорамалдары һатып ала. Эльвира "Социнвестбанк" коммерция банкының һаулыҡ пунктына етәкселек итә һәм медицина хеҙмәтенең баш табибы булып китә. Ул эстетик медицина менән әүҙем шөғөлләнә, халыҡ-ара симпозиумдарҙа, конференцияларҙа ҡатнаша, Башҡортостанда, Рәсәйҙә, сит илдәрҙә тәбиғи факторҙар менән дауалау тәжрибәһен өйрәнә. Шунан күптәнге хыялын ғәмәлләштерергә керешә, "Эстетик Д-Люкс" косметология клиникаһы белгестәре менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итә.

Мәскәүҙә косметологтарҙың халыҡ-ара конгресында ҡатнашыу, Фәнни матурлыҡ академияһында, күргәҙмәлә булыу матурлыҡ донъяһының күк ҡабағын асҡандай итә. Косметика күргәҙмәһенең ун ике павильонында биш көн буйы йөрөп, бөтә нәмә менән ентекле танышҡас, Эльвира "Эстетик Д-Люкс"ҡа эшкә күсә. Банктан кредит юллап, тәүәккәллек ҡыйыулыҡтары етештереү бизнесына ныҡлап тотонған, "Пышка" предприятиеһын ойошторған Рәсимә Мусинанан "Люкс" бинаһын һатып ала. Эшмәкәрлеккә Мәскәүҙән лицензия алыуға ла өлгәшә.

Банк структураһы шарттарында медицина, ғилми эш менән шөғөлләнеү бик үк ирекле булмаһа, үҙаллы "Эстетик Д-Люкс" салон-клиникаһында ниәттәрҙе, хыялдарҙы тормошҡа ашырыуға киң даирә асыла. Стаж ҙур, бай тәжрибә тупланған. Алда — яңы үрҙәр, яулайһы бейеклектәр.

Симпозиумдарҙа ишеткәндәрҙән, күргәҙмәләрҙә, салондарҙа күргәндәрҙән сығып, Эльвира шуға төшөнә: уңыш ҡаҙаныу өсөн заманса иң яҡшы ҡорамалдар, косметик саралар булырға, үҙ шөғөлдәренең оҫталары эшләргә тейеш. Шуға ла ул йәнә Мәскәүгә юллана, халыҡ-ара фирмалар, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән бәйләнешкә инә. Тәүәккәллек, ныҡышмалылыҡ һөҙөмтәһендә "Д-Люкс" салон-клиникаһы япон косметик линияһы, итальян ультратауыш, француз хромотерапия аппараттары, швед тренажерҙары менән йыһазландырыла.

Косметология буйынса махсуслашыу өсөн табиптар Мәскәүгә, Санкт-Петербургка уҡырға ебәрелә. Юлия Ғәббәсова, Флорида Давыдова эстетик медицинала мезотерапия, тән туҡымаларын биостимуллаштырыу методтары, тире ауырыуҙары косметологияһы, йыйырсыҡтарҙы төҙәтеүҙең хирургик булмаған алымдары буйынса уҡып, диплом алып ҡайта. Санкт-Петербург медицина академияһының дерматовенерология кафедраһы "Эстетик Д-Люкс" салон-клиникаһына сертификат бирә. Ғөмүмән, клиниканың бөтә төр эшмәкәрлегенә медицина лицензияһы бар: терапия, физиотерапия, мануаль терапия, дерматовенерология, массаж, дауалау

физкультураһы, косметология... Клиенттарҙы юғары квалификациялы белгестәр: физиотерапевт, дерматокосметологтар, мануаль терапия табибы, массажистар, тренер, парикмахерҙар, визажист, маникюр, педикюр, эпиляция буйынса белгестәр хеҙмәтләндерә.

Матурлыҡ һәм сәләмәтлек һарайы ”Д-Люкс”ҡа килеп ингәс, нәфис боролмалы мәрмәр күтәрмәнән үргә күтәреләһең. Алдыңда хикмәтле донъя, йылы хистәр уятҡан сәнғәт күренештәре асыла: флоранж стилендәге биҙәлеш, гөл-сәскәләр, затлы йыһаздар... Берәүҙәр уңайлы, йомшаҡ урындыҡтарға һыйынып, мода журналдарын ҡарай, икенселәр шифалы сәй, һут, кислородлы коктейль, ҡәһүә эсә. Илгәҙәк ҡыҙ ”Лидо” ресторанынан телеңде йоторлоҡ тәмлекәстәр, салаттар тәҡдим итә. ”Ожмах”тың бер һылыуы яғымлы тауыш менән ниндәй им-дауа кәрәклеген һораша. Әйткәндәй, хозур биҙәлеш, дизайн — үҙе лә хур ҡыҙылай гүзәл Эльвираның хыял, ижад балҡышы.

”Эстетик Д-Люкс”та процедуралар күп төрлө: сәләмәтлек, тән һәм йән, матурлыҡ өсөн дә. Эльвира һылыу үҙе мәғәнәле һәм образлы итеп әйткәненсә, ”Д-Люкс” — ул Көнсығыш эстетикаһы, Көнбайыш гармонияһы! Ҡарағыҙ, күрегеҙ, тип, им-дауа, матурлыҡ донъяһы менән мине лә ентекләп таныштырҙылар.

— Инфра-ҡыҙыл кабина — XXI быуат мөғжизәһе, кеше организмына өс төрлө йоғонто яһай, — тип, мөғжизәнең асылын аңлата баш табип. — Һауыҡтырыуы йәһәтенән байтаҡ хроник ауырыуҙарҙы дауалауға килешә, спорт йүнәлешендә ярыштар алдынан мускулдарҙы ҡыҙҙырыу өсөн ҡулланыла, организмды шлактарҙан, токсиндарҙан таҙарта, тән ауырлығын кәметә, яра-йәрәхәттәрҙең эҙемтәләрен йәһәтерәк бөтөрә, реабилитация осорон тиҙләтә; косметик тәьҫире лә яҡшы: тәнгә сәләмәт төҫ бирә, тире күҙәнәстәрен таҙарта, шымарта, тығыҙландыра. Ғөмүмән, инфра-ҡыҙыл кабиналағы сеанс целлюлиттан ҡотолдора, косметик процедураларҙы, массажды, тренажерҙарҙа шөғөлләнеүҙе һөҙөмтәлерәк итә.

— Ысынлап та мөғжизәле икән инфра-ҡыҙыл кабина. Пациенттарығыҙ һөйләүенсә, оҫталарығыҙ яһаған массаждар ҙа ғәжәп, иҫ киткес яҡшы тәьҫир итә. Уларҙа ла Көнсығыш эстетикаһы, Көнбайыш гармонияһы күҙаллана.

— Тап шулай. Япон, ҡытай, европа массаждары, испан SPA-массажы, аҫыл таштар менән испан терапияһы, ароматерапия, Сцен Тао таштары менән стресҡа ҡаршы массаж, целлюлитҡа ҡаршы массаж, вакуумлы массаж, гидромассаж, цигун гимнастикаһы һаулыҡ өсөн бик файҙалы.

Эльвира һылыу һөйләгәндәр, Һомайғоштай, күңелдәрҙе арбағыс серле һәм хозур донъяға әйҙәне. Сцен Тао — Ахен (Германия) базальт таштары ярҙамында һауыҡтырыуҙың һәм энергетиканы тергеҙеүҙең боронғо алымы. Уның йоғонтоһонда кире энергия кешенән тулҡын һымаҡ сайпыла. Ҡытай массажы европа массажынан үҙенең йомшаҡлығы, яй ғына эҙмәэҙлекле эшләнеше менән айырыла. Ыуыу-һылау, һыйпау, хәрәкәттәрҙең

һалмаҡлығы һәм еңеллеге үҙ ыңғайына аҡрынлап организмды гармоник хәлгә килтерә, матдәләр алмашыу процесын әүҙемләштерә. Тәндең бөтә мускулдарын ҡуҙғатҡан комплекслы массаж бигерәк тә эффектлы. Тай Чжень Фэй классик ҡытай мәктәбенә, уның төп йүнәлештәре булған медицина һәм психологияға ярашлы рәүештә, Көнсығыш массажы сеанстары хуш еҫ аңҡыған, талғын ғына моң таралған, шәмдәр янып торған бүлмәлә үткәрелә.

Шунының күңелгә ятышлы: дауалау, һауыҡтырыу, йәшәртеү процедуралары тәбиғи сараларға нигеҙләнгән. Кешенең һаулығы күп осраҡта ниндәй һыу ҡулланыуға ныҡ бәйле. Латинсанан Sanities per aqua, йәғни SPA беҙҙеңсә ”һыу менән дауалау” тигәнде аңлата. Шуға ла гидромассаж ваннаһын бик теләп алалар. Билдәләнгән температуралы һәм баҫымлы һыуҙы тәндең айырым урындарына, нөктәләренә йүнәлтеп, гидромассаж яһала. Ул минераль тоҙҙар, хуш еҫле майҙар менән байыҡтырылған. Уның йоғонтоһонда матдәләр алмашыныуы яҡшыра, шлактар сыға, тире күҙәнәстәре минераль элементтар менән тулылана. Унан һуң ылымыҡтарға, Германиянан, Американан килтерелгән шифалы батҡаҡҡа уранырға, ”Сүл эҫеһе” процедураһы тәьҫирен тойорға мөмкин. Киләсәктә Красноусольск шифалы батҡағын да ҡулланасаҡтар. Былдай дауалау һөҙөмтәһендә үҙеңде яңы тыуған бәпестәй еңел вә иркле, йәнә йән һәм тән тантанаһын тояһың.

— Хәҙер донъяла тәбиғәткә ҡайтыу, тәбиғи факторҙар, зарарһыҙ саралар менән дауалау популяр. Беҙ ҙә ошо йүнәлештә эшләйбеҙ: гәлсәр, малахит, базальт, йәшмә, үләндәр менән, һыу менән массаж; ылымыҡ, шифалы батҡаҡ менән урау; Көнсығыш бейеүҙәре, аэробика, гимнастика... — Үҙ эшенә мөкиббән Эльвира хисләнеп һөйләй. — Был тәңгәлдә эшмәкәрлекте киңәйтеү өсөн яңы матурлыҡ һәм сәләмәтлек йорто төҙөргә ниәтләнәбеҙ. Унда минераль һыулы бассейн, япон, марокко мунсалары ла буласаҡ.

Ямғыр ерҙе, тәбиғәтте йәшәрткән кеүек, тәбиғи матдәләр кешене йәшәртә. ”Эстетик Д-Люкс”та диңгеҙ ылымыҡтары менән тәнде таҙартыу (пилинг) тиреләге үлгән күҙәнәктәрҙе, бысраҡты бөтөрә, токсиндарҙы сығара, тирене шымарта, минералдар менән байыта. Клиникала үҙеңә ярашлы башҡа төр пилинг та яһатырға мөмкин: емеш кислоталары, ультратауыш, ретиноид пилингтары, лимфодренаж, ионофорез, хромотерапия, пирсинг, макияж...

Тиренең тәбиғи ҡартайыуы менән көрәшеү, йөҙҙө йәшәртеү, мускулдарҙы нығытыу, иммунитетын яҡшыртыу өсөн косметологик клиника юғары сифатлы органик матдәләр (ферментлы косметика) ҡуллана. Айырыуса йөҙҙө йәшәртеү ысулы — мезотерапияның мөмкинлектәре киң һәм һөҙөмтәле. ”Эстетик Д-Люкс”та проблемалы тирене, целлюлитты дауаларға, сабыртмаларҙан, тимгелдәрҙән, йыйырсыҡтарҙан арынырға, йөҙ формаһын үҙгәртергә мөмкин. Маңлайҙағы, күҙ тирәһендәге, биттәге йыйырсыҡтарҙы бөтөрөү өсөн косметик саралар ҙа, донъя-

ла иң эффектлы һаналған дауалау процедуралары, инъекциялар, прививкалар ҙа файҙаланыла. Дауалау программалары кешенең йәшенә, тәненең торошона ярашлы башҡарыла. Клиниканан ҡатын-ҡыҙҙар ғына түгел, ир-егеттәр ҙә йәшәреп, кәйефтәре күтәрелеп, ҡөҙрәтләнеп сыға. Айырыуса популяр артистар, йырсылар, Башҡортостан телевидениеһы журналистары.

”Эстетик Д-Люкс”тың Мәскәүҙә, Японияла уҡып ҡайтҡан белгестәре классик косметик процедураларҙы ла, косметология буйынса иң яңы ҡаҙаныштарҙы ла тәҡдим итә. Нормаль, ҡоро, майлы, пигментлы типтағы тиреләр өсөн төрлө программалар төҙөлгән. Профессиональ япон косметикаһы файҙаланыла. Әүҙем ингредиенттар тире ҡатламдарына үтеп инеп, күҙәнәктәрҙе эшкәртә һәм тергеҙә. Заманса аппараттарҙа форез, миолифтинг, ультратауыш менән таҙартыу үткәрәләр, стресты, психик көсөргәнеште (релаксация) алалар.

Ир-егеттәр клиникаға сәс ҡойолоу, пеләшләнеү, тире ауырыуы айҡанлы йыш мөрәжәғәт итә. Ентекле тикшереү, консультация үткәндән һуң ”АМД” лабораторияһы (АҠШ) методикаһы буйынса дауалау курсы башлана. Әйткәндәй, ”АМД” селтәренең Урал регионында берҙән-бер филиалы Өфөлә, ”Эстетик Д-Люкс” салон-клиникаһында ғына. Тамам пеләшләнеүҙән ҡотолған, ҡабарып торған сәстәрен ҡойолоуҙан һаҡлап алып ҡалған ирҙәрҙең шатлығының, табиптарға рәхмәтенең сиге юҡ.

Клиникала фәҡәт профессиональ косметика, мәҫәлән, йәш ҡиәфәтлекте, сырайлыҡты, гүзәллекте, нәфислекте һаҡлау сәнғәте вә белеме тәрән танып беленгән Японияла, Ҡояш ҡалҡҡан илдең ҡурсаулыҡтарында үҫкән үҫентеләр һығымсаларынан яһалған препараттар, кремдар файҙаланыла. Япония, Германия, Америка косметикаһын Мәскәүҙән даими рәүештә Эльвираның инәһе Зинфира апай ебәреп тора. Мәскәүҙә төрлө яңылыҡ, белешмә-мәғлүмәт алырлыҡ матурлыҡ, сәләмәтлек институттары, косметика индустрияһы бар.

”Д-Люкс”та тире аҫты майынан арыныу, һомғоллоҡ, фигураны моделләштереү һәм коррекциялау заманса ысулдар менән бойомға аша. Һомғол фигураны һаҡлау — һәр ҡатын-ҡыҙҙың хыялы. Клиникала ”Йәшел кофе”, ”Марокко коконы”, ”Һөт өҫтө менән карамель һәм ер еләге” SPA-программалары — нәфис буй-һын саралары. Быға цигун гимнастикаһы, уникаль швед тренажерҙары менән йыһазландырылған залда шөғөлләнеү ҙә булышлыҡ итә. Улар ғәжәп йоғонтоло. Ҡәҙимге тренажерҙарҙан айырмалы рәүештә, был тренажерҙарҙа шөғөлләнгәндә бөтә мускулдар хәрәкәткә килә. Шунлыҡтан ҡыҫҡа ваҡытта мускулдар үҫешә, артыҡ май ҡатламдары бөтә. Көсөргәнешле эштән һәм хәлдән һуң яҙылырға, үҙеңде иркен тойорға мөмкин. Германия фирмаһы велотренажеры һәм йүгереү юлы бик тә үҙенсәлекле. Компьютерҙарында инструктор ярҙамында дистанцияны, урындың рельефын программалаштырырға, пульс буйынса шөғөлләнеү ваҡытын, күпме көс һалыуҙы билдәләргә була.

”Эстетик Д-Люкс” салон-клиникаһында күптәр үҙҙәренең ҡабатланмаҫ образын, стилен, гармонияһын таба, һомғол, һөйкөмлө, һоҡланғыс кешегә әйләнә. Бында маникюр, педикюр оҫталары, визажистар, ”Wella”, ”Loreal”, ”Dolores”, ”Sebastian” кеүек шөһрәтле студияларҙа профессиональ кимәлен күтәргән парикмахер-стилистар ҙа булышлыҡ итә. Улар — Рәсәй чемпионаттарында, ”Аҡ алтын”, ”Алтын подиум”, ”Алтын ҡайсы”, ”Алтын тараҡ” конкурстарында Гран-при яулаусылар, еңеүселәр, премияларға һәм дипломдарға лайыҡ булыусылар. Сәстәрҙә иһә ынйы, перламутр балҡышы, ”Луо Колор” гүзәллеге! Модалы прическалар, ”Олива”, ”Сакура”, ”Һибелгән нур”, ”Йыһан тәрәнлеге” кеүек буяу ысулдары ҡатын-ҡыҙҙы һоҡланғыс итә. Образлы итеп әйткәндә, алиһәләр ”Эстетик Д-Люкс”та тыуа. Эльвира һылыу үҙе ”Матурлыҡ” номинацияһы буйынса ”Триумф—2004” конкурсы лауреаты, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең почетлы дипломына, Өфө ҡала хакимиәтенең ҡиммәтле призына лайыҡ булыусы.

Хәҙер ”Эстетик Д-Люкс” салон-клиникаһы Өфөлә генә түгел, бөтә Урал регионында иң яҡшы салон. Уның иң оҫта стилистары 2004 йылда Сочи ҡалаһында сәсте буяуҙың яңы ”Фристайл” технологияһын күрһәтте һәм Рәсәйҙең парикмахер сәнғәтен үҫтереүгә тос өлөш индергәне өсөн почетлы сертификат менән бүләкләнде. Дәрәжәһе күтәрелгәндән күтәрелә, бәҫе артҡандан арта уның. Салон-клиникала немец делегацияһы булды. Парикмахер сәнғәте буйынса немец эксперттары ассоциацияһы вәкиле ”Эстетик Д-Люкс”тың донъя стандарттарына ярашлы аппараттар, ҡорамалдар менән йыһазланышын, европаса биҙәлешен, хеҙмәтләндереүҙең яҡшы сифатын, оҫталарының юғары профессиональ кимәлен билдәләне. Тағы ла бер ҙур ҡыуаныс — ”Д-Люкс” Рәсәйҙең иң яҡшы салондарының халыҡ-ара SP-клубына ҡабул ителде. Эстетик медицина иһә фән булып танылып, Башҡорт дәүләт медицина университетында табиптарҙы уҡытыу программаһына өҫтәмә курс итеп индерелә. Эльвира Батыршина үҙе иһә эш араһында кандидатлыҡ диссертацияһын яҙып тамамлай.

”Д-Люкс”тың эшмәкәрлек даирәһе киң. Уның уҡыу үҙәге-студияһы республикабыҙ ҡалаларының матурлыҡ салондары өсөн белгестәр әҙерләй. Уҡыу үҙәген тамамлаусылар ”Время красоты”, ”Волшебница”, ”Лаванда”, ”Лик” кеүек билдәле салондарҙа эшләй. Салон-клиникала хозурлыҡҡа һоҡланып йөрөгәндә Эльвира һылыу: ”Беҙҙең һөнәр — гүзәллек ижад итеү. Талантыбыҙҙы, йөрәгебеҙ, ҡулдарыбыҙ йылыһын кешеләргә бирәбеҙ, йәндәренә һәм тәндәренә тулы гармония алырға ярҙам итәбеҙ”, — тип ихлас йылмайҙы. Уның йылмайыуынан донъя тағы ла матурайып киткәндәй тойолдо.

”Эстетик Д-Люкс” салон-клиникаһы ”Гәлсәр һандуғас” республика йыр конкурсының бағымсыһы ла икән. Эльвира һылыу үҙе лә гүзәллек донъяһы алиһәһе, ожмах һандуғасы һәм ҡарлуғасы кеүек. Матур, нәфис, нәзәкәтле, һөйкөмлө, эшһөйәр...